Рауил НИҒМӘТУЛЛИН

# ХАЛҠЫМ ӨСӨН

*Рауил Хөрмәт улы Ниғмәтуллин 1941 йылда Ишембай районындағы Ғүмәр ауылында тыуған. 15 йәшенән тыуған колхозында эшләй, шул ук вакытта колхоз комсомол ойошмаһы етәксеһе була. Стәрлетамак зооветтехникумын, БДУ тамамлай. 1970 йылдан Әхмәр урта мәктәбе директоры, 1973 йылдан РСФСР Милли мәктәптәр институты ғилми хеҙмәткәре. Артабан “Башкортостан укытыусыһы” журналының баш мөхәррир урынбаҫары (1977), Башкортостан китап нәшриәте мөхәррире (1979) , Стәрлетамак яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе (1984) була. 1993 йылдан БДУ доценты. Уның кескәйҙәр өсөн “Еңмеш” (1982), “Кемгә ниндәй исем” (1993), “Урман музыканттары” (1993), өлкәндәр өсөн “Тауҙарҙа таң” (1981), “Япрак еле” (1984), “Мөхәббәткә юк ул өҙәрем” (1989), “Ак нур” (1991), “Кыңғырауҙар” (1996) шиғырҙарҙан, йырҙарҙан, кобайырҙарҙан, мәҫәлдәрҙән, поэмаларҙан торған китаптары донъя күрҙе. Укытыусылар өсөн “Әҙәбиәт буйынса кластан тыш эштәр” (1983), “Үҫмер” серияһындағы китаптары сыкты. Ул Башкортостан халык партияһы етәксеһе булды, БДПУ доценты, Бөтә донъя башкорттары королтайы башкарма комитеты ағзаһы, Башкортостандың атказанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*



## ХАЛҠЫМДЫҢ ТАМЫРҘАРЫ ҺИНЕҢ МЕНӘН

**Ә**ле тағы күңелебеҙ шул уҡ яҙҙы
**Х**алҡыбыҙға ҡайтарыуға юл ярыуҙа
**М**әңгелеккә яҙҙы илгә ҡайтарыуҙа,
**Ә**йткәненде раҫлап, ҡулға ҡул барыуҙа!
**Т**ыуған халҡым яҙмышына яҙһын,
тип, яҙ —
**З**аманында яралттың һин ошо яҙҙы!..
**Ә**ле лә һин киңәйтеүҙә ҡараштарҙы,
**К**иңәйтеүҙә халҡым яҙы офоҡтарын —
**И**рек даулап, ирлек даулап, ҡыуып
ҡарҙы!
**В**аҡыт һынауҙарын үтеп, яҙғандарың
**Ә**ле лә бит, ҡараштарҙы яҙа-яҙа,
**Л**әйсән булып ҡайтҡас беҙгә яңы яҙҙа
**И**рек, хөрлөк елен берҙәм татыу яҙа!
**Д**ауылдарҙа яҙға юлдар ярыу серен
**И**ң кәрәктә өйрәнәбеҙ, яҡташ, һинән!..
**Г**әүһәрҙәрен башҡортома ҡайтарыуҙа
**Ә**ле лә һин беҙҙең менән, беҙҙең менән!

## ИЛ УЛЫНА

**Х**алҡың һинең менән ғорурлана —
**Ә**ле лә гел булғас яуҙарҙа,
**К**өрәштәрҙә булғас халҡың өсөн,
**И**лемдәге изге хаҡлыҡ өсөн
**М**әңге балҡыр ҡояш даулауҙа!

**Ғ**үмерҙәрҙең күсте дауамына
“**И**л улы” һәр яңы ораның!
“**Л**ирика”ны тоғро яугир итеп,
**Э**рнеүҙәрҙе йәндә еңер итеп,
“**Ж**урнал”, “Союз…” сафын ҙурланың!
**Е**гетлегең ҡалды “Погонһыҙ…”ҙа
**В**аҡлыҡтарҙан өҫтөн тауҙарҙа!
“**Ҡ**ырҡ алтынсы һалдат” беҙҙең менән
**А**лғасаҡта — хаҡлыҡ даулауҙа!

## ХАЛҠЫМ ӨСӨН

**Ш**аянлығың, шат, шуҡ һүҙең, булып үҙең,
**Ә**ле һаман бөлдөрә лә, көлдөрә лә!..
**Й**ырҙарың да йәмдәшлеген, йәндәшлеген
**Х**әҙер ҙә шул үҙҙәре үк белдерә лә!..
**З**ауҡың һаман зауыҡтарҙы уята ла,
**А**лып китеп рух иленден йәмдәренә,
**Д**арыу була — ә ҡарашың, ҡыйыш йәнде
**А**лып тетеп,“хәнйәр сәнсә йәндәренә!”

**М**еҫкендәрҙе, көлә-көлә, телең телә,
**Ө**тә-тетә үт сәсерҙәй кейектәрен —
**Х**алҡыңа ҡот килтерерҙең күтәрәһең
**Ә**хмәтзәки, Әмир, Муса кеүектәрен!
**М**әңгелектең изге мәлен тотоуҙарың,
**М**өмкинлеген алыуҙарың — халҡың өсөн!
**Ә**йткән һүҙҙәреңдә ул саҡ халҡың өсөн —
**Т**апҡырлығың, үткенлегең, хисең, көсөң!..
**З**амандары үҙгәрһә лә күпме генә,
**А**лғы сафта, һин әле лә беҙҙең менән!..
**К**үтәрәһең көрәш сәмен, йыр-моң йәмен,
**И**рек тәмен бәҫле, нурлы һүҙең менән,
**Р**ухың менән, төҫ ташламаҫ йөҙөң менән!

**У**лы ла һин, боло ла һин башҡортомдоң!..
**Л**айыҡтарҙан лайығыраҡ алтын-хаҡың!..
**Ы**ласыны, ышанысы итә халҡың!..
**Н**амыҫына, өмөтөңә ышанғандар —
**А**ҡ көндәргә әйҙәүселәр туған халҡын!

**У**яулыҡ та, олпатлыҡ та үҙеңдән!
**Л**әкин уйла — халҡың йөҙө йөҙөңдә!
**Ы**шаныслы аҙымыңдан, һүҙеңдән —
**Н**ыҡлыҡ булыу илебеҙҙең теҙендә!..
**А**ҡ, хаҡ эштәр башланһындар үҙеңдән!

## «АМАНАТЫҢ» БЕҘҘӘ

**Р**еспубликам, халҡым бәҫен күтәреүҙә
**Ә**ле лә һин алғы сафҡа әйҙәүсеһең,
**М**атурлыҡты яралтырҙар ҡорон, сафын
**И**рек өсөн көрәш сафын биҙәүсеһең!

**Ғ**азаптарҙы халҡым ҡабат күрмәһен, тип,
**А**са инең ҡараштарҙа офоҡтарҙы —
**Р**еспубликам ҡотон ҡойған «осоҡтарҙы»
**И**семләүҙә ҡараштарың офоҡ ярҙы!..
**П**артияның күҫәге лә ҡурҡытманы —
**О**сор рухын яҡтыртыр көс тапҡас үҙең!..
**В**аҡыт һынауҙарын үткәс, булып түҙем —
**Ҡ**анат бирҙе шул йәштәргә тоғро һүҙең!..
«**А**манатың» беҙҙә, беҙҙә яҡты йөҙөң!

## АЯҘ ИРТӘГӘ

**Ғ**үмеркәйең халҡыңдың хаҡ юлында,
**А**хаҡтарын барлар, ҙурлар алышта!
**Й**ылдар төпкөлөнән халҡың асылын,
**С**ал тарихын, аҫылдарҙан аҫылын
**А**сыуҙа һин — шул юлыңды алышма!

**Х**акимлыҡтар ҡорған ҡыйыш кәртәләр
**Ө**йөрмәһен ярып, һинең ҡиссалар
**С**алауаттай йөҙәр халҡым улының
**Ә**йтер хисен, рухын, көсөн асалар!
**Й**ырауҙарға, сәсәндәргә йырҙашлыҡ
**Е**гетлектең, бөйөклөктөң билгеһе!..
**Н**амыҫ эшең — оло «Ҡанлы илле биш»,
**О**лпатлыҡтың, остазлыҡтың өлгөһө!
“**В**атандаш”ың инде еккәс тәртәгә —
**Ҡ**алдырмайса уны ҡыҫыҡ кәртәгә,
**А**лып кит һин беҙҙе аяҙ иртәгә!

## ЙӨҘӨНДӘ ХАЛҠЫҢ ЙӨҘӨ

**М**еңдәр рухын ил терәге иткәнең,
**О**ло маҡсат, ил кәрәге иткәнең —
**Р**еспубликаң өсөн изге эш булды,
**Т**уған халҡың хәстәренә иш булды:
**А**затлыҡтың быуындарын турайтты,
**З**акондарҙа халҡың көсөн ҙурайтты,
**А**лыштарҙа халҡың көсөн ҙурлатты!

**Ғ**әжәбстан булыуҙары Ватандың
**Ө**мөттәрҙә — һин уның баш атаһы!
**Б**ашҡорт иле тағы сәскә атаһы,
**Ә**ле яңы үрҙәренә атлайһы,
**Й**ылыныуы күңелдәрҙә елдәрҙең,
**Ҙ**урланыуы илдә бөтә телдәрҙең,
**У**рын алыуҙары илдә хаҡлыҡтың,
**Л**айыҡлылар ҡул аҫтында халҡыңдың,
**Л**айыҡ үрҙә сәскәләнеп балҡыуы —
**А**ҡлауыңдан ышанысын халҡыңдың!

## ҠАРАҺАҠАЛ КЕҮЕК

**Б**ыл донъяның үттең дауылдарын
**У**рап түгел, күкрәк менән ярып!..
“**Л**оулла”лыҡ хыялына тарып,
“**А**ғиҙел”дә аҡ елкәндә барҙың —
**Т**ылдар булған саҡта ҡырҡҡа ярыҡ!

**Р**әхәтлеккә бағламаның өмөт,
**А**лдатманы “ҙурҙар” биргән өгөт —
**Ф**айҙа алһын, тиеп, бөлгән халҡың,
**И**рек даулаһын, тип, берҙәм ҡалҡып,
**Ҡ**ырын кәртәләрҙе үттең ватып!
**О**йоштороп “Ырыу...”ҙарың ҡорон,
**В**аҡыт кәртәләрен булдың һүтәр!..
“**Ҡ**араһаҡал” кеүек була алдың
“**А**хрызаман көткәндә” лә күптәр!

## ҠАЙТАРҺАҠСЫ

**Й**ыһандарлыҡ килә һинең тамырҙан,
**Ы**шаныҡлы халҡыңдағы ҡамырҙан,
**Һ**әүбәндәрҙең, Уралдарҙың ҡанынан —
**А**саһың һин шуға “ҡурҡмай”, яңыса,
**Т**арих серен, тарих йөҙөн яңынан!

**С**олтандарҙың ысын йөҙөн асаһың,
**О**лтанына тиклем асыҡ күрәһең!..
**Л**әпәштәрен ләпәш килеш бирәһең —
**Т**алантлының ҡоластарын ҡирәһең!..
**А**йбарлығың бөйөк халҡың хаҡына!..
**Н**ыҡышлығың изге хаҡлыҡ хаҡына!..
**О**латайҙар рухын шулай ҡайтарып,
**В**аҡыт сүбен, саңын берҙәм аҡтарып
**Ҡ**айтарһаҡсы халҡыма саф таңдарҙы,
**А**ҡ көндө, хаҡ хакимлыҡты, заңдарҙы!

## ҺИН БЕҘҘӘ

**Д**онъяның “Туҙҙырып тамуғ”ын
**И**нде һин киткәндәй күптәргә —
**Н**амыҫың һаман да халҡыңда
**И**леңдең рух-ҡотон күтәрә,
**С**улпандай әйҙәй ҙә күктәргә!

**М**илләтең һиңә хас нурында,
**Ө**мөттә, һинеңсә йырында —
**Д**әрт, яңы рух халҡың йырында,
**Ә**ле лә сәселгән ҡырында!..
**Р**әйлән дә тик һине һағына!..
**И**лтмәк тә гел бергә сағылға —
**С**ыуаҡлы баҡсала сағыңа!..

**У**л сағың, Динис, гел ҡаласаҡ,
**Л**әйсәндәй күңелде һуғарып!..
**Ы**шаныс, йәм менән һуғарып!..
**Н**ур сәсеп йәшәйһең һин беҙҙә,
**А**тыңды ебәрмәй туғарып!

## ШОҢҠАРҒА ТИҢ

**Р**әхмәт һүҙен әйтер форсат сыҡты бөгөн
**О**ло, күркәм, күптән көткән изге эшкә —
**Б**ашҡортомдоң иң арҙаҡлы улдарының
**Е**ребеҙҙә халҡы өсөн ҡылғандарын
**Р**аҫлар, ҙурлар, нурлар көҙгө кеүек эшкә,
**Т**апҡыр заман һүҙе, йөҙө кеүек эшкә!

**Б**ашҡорт халҡын ҙурлар был эш — халҡым йөҙө,
**А**затлыҡҡа әйҙәр тапҡыр һүҙҙең үҙе!
**Й**ылдар аша ҡайтты унда “Сыбар шоңҡар”,
**Ы**ласындар менән, рухландырып беҙҙе!
**М**ең-мең рәхмәт! Күтәрҙең һин иң кәрәктә
**О**лолап ҙур эштәр ҡылған шоңҡарҙарҙы! —
**В**аҡытында байраҡ булған шоңҡарҙарҙы!
**Ҡ**аяларҙа булһа шоңҡар — офоҡтар киң!..
**А**ҫыл эшең менән үҙең Шоңҡарға тиң!

## ХАЛҠЫМ РУХЫН ҺАҠЛАР ӨСӨН

**Р**ухын халҡым һәр саҡ бөтөн һаҡлаһын тип,
**А**ҡлаһын тип күптән килгән өмөттәрҙе,
**У**йлатаһың һылыуҙарҙы, егеттәрҙе —
**И**лгенәһен бәҫле, көслө ил итәрҙе!
**Л**әйсән булып, илгенәһен гөл итәрҙе!

**Б**ашҡортомдоң берҙән-берен — баш илкәйен
**И**мен, бай, ҙур, хозур итеп һаҡлар өсөн,
**К**үркәмлеген юҡ итерҙән яҡлар өсөн,
**Б**үленмәйсә, бөлөнмәйсә, бил бирмәйсә
**А**тайҙарҙың аманатын аҡлар өсөн,
**Е**ребеҙҙе, телебеҙҙе, түлебеҙҙе
**В**аҡландырмай, дәрәжәле һаҡлар өсөн
**Ҡ**ояш булып балҡый, балҡыр рухың, хисең!
**А**ртһын ошо рухты яҡлар, һаҡлар көсөң!

*Миңлегөл ХИСАМОВА*





## ЙӘШӘҮ СӘМЕ

Аһ! Йәшәйһе көндәр бар икән дә,
Йәп-йәш үлән сыҡҡан, йәш үлән!
Күңел кенәһе юҡ, шул сафлыҡты
Сабый ҡулдарына тиң күрәм.

Бала ҡулы ҡосаҡлаған һымаҡ,
Яҙ һулышы һуштан яҙҙыра.
Ғашиҡ булыу өсөн күп кәрәкме?
Хыялыңа илтә яҙ ғына.

Һулыш алам, тимәк, һөйөп янам,
Йөҙ йәш тулғанда ла йәнемә.
Йәш үләндәй минең йөрәк асыҡ,
Үлемесле йәшәү сәменә!

## ДҮРТ ТАРАФЫМ – ҠОЯШ!

Дүрт тарафым — ҡояш, ҡояш ҡына,
Эҫеһенән йәнем яҡтыра.
Уйҙар мәрйен кеүек тәгәрәйҙәр,
Күктәр һуҙған йәйғор-яҡтынан.

Үрсер әремдәре, ҡылғандары
Зәңгәрләтә алһыу хыялды.
Ҡышҡы йоҡоларға талған инем,
Рәхмәт төшһөн, һиндә уяндым!

Тыуған тупраҡ! Талған күңелемде
Күккә күтәреүең — мең биҙәк!
Күргән михнәттәрем юҡҡа сыға,
Ҡурсып тороуҙарың гел һиҙәм.

Аҡ ҡылғандар, аҡ ҡылғандар еҫе,
Айный алмам инде мин һеҙҙән!
Дүрт тарафым ҡояш — тыуған яғым,
Һүрелеп һүнмәҫ яҡты мөғжизәм!

## ИКЕ ТӘҘРӘ

Ике тәҙрә — өйҙөң ут күҙҙәре,
Баҙлап яна ҡышҡы төндәрҙә.
Ниндәй хәсрәт, ниндәй шатлыҡ
йәшәй
Ошо өйҙә яҡты көндәрҙә?!

Инмәһендәр ине хәүеф-хафа
Ҡыҫҡа ғына ғүмер эсендә.
Күрмәһендәр ине этлектәрҙе,
Ҡайғыларҙың ҡара төҫөн дә.

Ата-әсәһенең ҡуш ҡанаты —
Сабыйҙары торһон осоноп.
Зәңгәр күккә осҡан хыялдарҙың
Киләсәккә юлы ҡушылыр.

Ике тәҙрә — өйҙөн ике күҙе,
Донъяларға ҡарай яҡтырып.
Бәхет нуры менән ҡотло булһын,
Үҙҙәренә торһон саҡырып.



## ҮТКӘН КӨНГӘ РӘХМӘТТӘРЕМ ҠАЛҺЫН

Үткән көнгә рәхмәттәрем ҡалһын,
Үткән төнөм, үткән юлыма.
Тын аламын әле, юғалманым,
Әйләнмәнем телһеҙ ҡолоңа.

Үткән көнгә изгелегем ҡалһын,
Эштәремде барлап сығайым.
Дөрләп янған минут буш үтмәне,
Үҙ-үҙемде йәнә һынайым.

Үткән көнгә ярһыуҙарым ҡалһын,
Йәндән өҙөлөп йырым тыуғанда.
Кемдергәлер бәлки иш булыр ул,
Үлән йөҙөн ысыҡ йыуғанда.

Үткән көнгә үпкәм ҡалыр бәлки,
Ҡалһын әйҙә, ул да ят түгел.
Юрғаламаһын тик ҡара уйҙар,
Яуыз ниәттәрҙән, йән, төңөл.

Үткән көнгә рәхмәттәрем ҡалһын,
Аҡ бәхеттәр ҡалһын үткәнгә.
Эй, яҙалы йәнем, ярат шулай,
Таңдар атыр сабыр иткәнгә...

## УЯН, ЯҘЫМ!

Ҡыш!
Сихри урман, әкиәттәр иле,
Ҡар туҙҙырып уйнаҡлаған еле,
Көйҙәре лә шаулы, йылғыр елле,
Хыял микән, әллә елдәр теле.

Ҡыш!
Эштәренән бушап арыған аҡлан,
Өшөгәндер, йыуашайып талған.
Бесәнселәр бында кәбән һалған,
Йәй йылыһы кәбәндәрҙә ҡалған.

Ҡыш!
Йәнем йоҡолағы хыял төҫлө,
Хыял уянғанда, моңом көслө.
Аҡ ҡарҙарҙай хис-тойғолар ишле,
Яңғыҙ күңелемә әллә ишме?!

Ғүмер ҡышы елгәнен мин тоям,
Әсе елен генә ҡайҙа ҡуям?
Һыҡҡылар ҙа бәлки, бәргеләр ҙә,
Ҡайҙа яҙым, эй яҙым, һин, уян!